Муниципальное автономное дошкольное образовательное учреждение
детский сад № 5 «ПИН и ГВИН» городского округа город Агидель
Республики Башкортостан

«Үгәй ҡыҙ»
башҡорт халыҡ әкиәтен
сәхнәләштереү

«Кояшҡай» театр студияһы етәксеһе:
Фәлиева Гөлнара Рәис ҡыҙы

Агидель

«Үгәй ҡыҙ» башҡорт халыҡ әкиәтен сәхнәләштереү

Маҡсат: башҡорт халыҡ әкиәтен сәхнәләштереү; ролдәрҙе башҡарыу оҫталығын үҫтереү; балаларҙың ижади һәләтен үҫтереү; диалог аша әңгәмә алып бара белергә өйрәтеү.

Йыһазландырыу: өй декорацияһы, ҡойма, ағастар, өй йыһаздары, самауыр, ашамлыҡтар ҡуйылған өҫтәл, эскәмйә, балаҫ, сигеүле таҫтамал, йөн иләү өсөн көнйәлә таяғы, тоҡсай, ҡомған, сигелгән ҡулъяулыҡтар, мунса декорацияһы, мейес макеты, табаҡ, минлек, йыуғыс, 2 күлдәк, шәл, ситек, юрған, мендәр, һандыҡ, ҡыҙҙар һәм малайҙар өсөн башҡорт халыҡ костюмдары.

Ҡатнашалар:
Үгәй әсәй - Ләйсән Мөғтәсим ҡыҙы
Атай- Әлфиә Әнсәр ҡыҙы
Әбей - Гөлнара Рәис ҡыҙы
Үгәй ҡыҙ Гөлсәсәк - Нурғәлиева Элина
Үгәй әсәйҙең ҡыҙы Алһыу - Муллағәлиева Элина
Аулаҡҡа килеүсе малайҙар,ҡыҙҙар - Мөхәмәҙиев Ильяс, Фәтхетдинов Денис, Басыров Айнур, Ғаянов Илдар, Вафина Элина, Миндиярова Аделина, Кәримова Вилена, Зинова Катя, Димитриева Христина, Акименко Лиза, Вечтомова Алина, Хәбибуллина Элина.

Үгәй әсәй: Ниндәй күңел асыу, ял итеү ти. Ә йөндө кем иләй? Былайҙа эшең етәрлек.Бар, бар.Мунсала йөндө иләй тор.

(Гөлсәсәк ҡул эштәрен алып мунсаға китә).

Икенсе бүлек

(Өй эсе. Кис ултырырға аулаҡҡа ҡыҙҙар, малайҙар килә. Улар ҡул эштәре алып килә).

Ҡыҙ: Һаумыһығыҙ, беҙ кис ултырырға, аулаҡҡа килдек.

Алһыу: Һаумыһығыҙ, әйҙәгеҙ, түрҙән уҙығыҙ!

Ҡыҙ: Беҙ буш килмәнек, ҡул эштәре алып килдек.

Малай: Ҡыҙҙар, ҡул эштәрегеҙҙе күрһәтегеҙ әле!

Ҡыҙ: Мин ҡулъяулыҡ сигеп алып килдем.

Малай: Эй, ҡулъяулығың бигерәк матур!Биҙәктәре сағыу, ниндәй матур!

Ҡыҙ: Мин ойоҡ бәйләп алып килдем.

Малай: Эй, ойоғоң матур, йомшаҡ икән!

(Бер береһенең ҡул эштәрен ҡарайҙар, бер- береһен маҡтайҙар, ултырышалар).

Малай: Ҡыҙҙар, малайҙар, әйҙәгеҙ, уйнап алайыҡ әле.

Ҡыҙ: Ниндәй уйын уйнайбыҙ?

Малай: «Йөҙөк һалыш» уйыны!

Алһыу: Кем йөҙөк һала? Ә кем күҙәтә?

(Йөҙөктө таба алмаған күҙәтеүсегә яза бирелә. Беренсе яза - әтәс булып ҡысҡырырға, икенсе яза - «Башҡорт ҡыҙҙары» бейеүен башҡарыу).

Малай: Уйынды дауам итәйек! «Түбәтәй йөгөртөү» уйыны! Түбәтәй кемдә ҡала, шул мәҡәл әйтә.

1. Ағасты япраҡ биҙәй, кешене хеҙмәт биҙәй.
2. Ҡулың да - байлыҡ, белем дә байлыҡ.
3. Эш бөткәс уйнарға ярай.

Малай: Күңелле итеп бер йырлапта алайыҡ әле!

(Йыр «Туған телем» башҡарыла).

Алып барыусы: Һаумыһығыҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар, хәйерле көн кескәй дуҫтарым!

Йәмғиәттә ғәиләнең ролен нығытыу, быуындар бәйләнешен һаҡлау, сәләмәт тормошто пропагандалау йәһәтенән беҙҙең балалар баҡсаһында саралар йыш үткәрелеп тора. Быйыл Башҡортостанда имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы. Ошоно иғтибарға алып, хөрмәтле тамашасылар, «Ҡояшҡай» театр студияһы һеҙҙең иғтибарығыҙға «Үгәй ҡыҙ» тигән башҡорт халыҡ әкиәтен тәҡдим итә.

Беренсе бүлек

(Өй эсе матур итеп йыштырылған. Балаҫ, һөлгөләр менән биҙәлгән. Өҫтәлгә самауыр, ашамлыҡтар ҡуйылған. Ир менән ҡатын өҫтәл артында сәй эсеп ултыралар).

Үгәй әсәй: Атаһы, икмәк бешерергә онобоҙ бөткән. Әллә тирмәнгә барып ҡайтаһыңмы?

Атай: Ярай, ҡатын, мин он тарттырырға бойҙай әҙерләйем. Һин миңә юлға ашарға әҙерлә улайһа.

(Үгәй әсәй ашарға йыя, атай сығып китә. Бер аҙҙан кире инә.)

Үгәй әсәй: Бына атаһы, ашарға әҙерләнем (ашамлыҡтар һалынған тоҡсай бирә).

Атай: Рәхмәт әсәһе. Юлда ике-өс көн үтәр инде. Мин он тарттырып ҡайтҡансы һәйбәт кенә йәшәп торағоҙ.

Үгәй әсәй: Ярай, атаһы хәйерле юл, иҫән-һау ғына йөрөп ҡайт.

(Атай ашамлыҡтар һалынған тоҡсайҙы алып сығып китә).

Үгәй әсәй: (ҡыҙҙарын саҡырып ала) Гөлсәсәк, Алһыу килегеҙ әле бында. Атайығыҙ тирмәнгә он тарттырырға китте. Әйҙәгеҙ бөгөн кис ултырып, аулаҡ ойошторо алайыҡ.Ә һин Гөлсәсәк, бар ҡыҙҙарҙы кис ултырырға саҡырып кил. Ә һин минең матурым, ҡыҙым Алһыу, ултырып ял итеп тор.

(Үгәй ҡыҙ Гөлсәсәк сығып китә.Үгәй әсәй үҙ ҡыҙының сәсен матур итеп үреп ҡуя. Гөлсәсәк инә.)

Үгәй әсәй: Гөлсәсәк һин кис ултырырға ҡыҙҙар килгәнсе ҡул эштәреңде ал да мунсаға бар. Һиңә күңел асып ултырырға урын юҡ. Йөндө күберәк иләргә кәрәк. Алһыу ҡыҙыма бирнәгә балаҫ һуҡтырам.

Үгәй ҡыҙ: Эй, әсәй, мин ҡыҙҙар менән уйнап, ял итеп алырмын тип уйлағайным.

Малай: Афарин, ҡыҙҙар, малайҙар!Ҡыҙҙар,күңелле итеп бейеп алығыҙ әле!

(«Яулыҡтар менән бейеү» башҡарыла).

Малай: Аулаҡ өйҙә бик күңелле булды, рәхмәт!

Малайҙар, ҡыҙҙар: Һаубулығыҙ!

Өсөнсө бүлек

(Мунса. Мунсала үгәй ҡыҙ Гөлсәсәк ҡурҡа-ҡурҡа йөн иләп ултыра.Ап-аҡ сәсле бер әбей килеп инә).

Әбей: Һаумы, ҡыҙым!

Әйҙә, ҡыҙым беҙгә,
Беҙҙекеләр байҙар,
Ашайҙар ҙа эсәләр,
Уйнайҙар ҙа көләләр.

Үгәй ҡыҙ: Һаумы, әбекәй! Эй,әбей, бик барыр инем дә, кейергә күлдәгем юҡ бит, нимә кейеп барайым?

(Әбей йүгертеп күлдәк килтереп бирә).

Әбей: Бына, ҡыҙым, күлдәк кей!

Әйҙә, ҡыҙым, беҙгә,
Беҙҙекеләр байҙар,
Ашайҙар ҙа эсәләр,
Уйнайҙар ҙа көләләр,
Һиңә күңелһеҙ булмаҫ.

Үгәй ҡыҙ: Эй, әбей, бик барыр инем дә, минең башыма шәлем юҡ.

(Әбей йүгертеп шәл килтерә).

Әбей: Бына, ҡыҙым, шәл һиңә.

Әйҙә, ҡыҙым, беҙгә,
Беҙҙекеләр байҙар,
Ашайҙар ҙа эсәләр,
Уйнайҙар ҙа көләләр.

Үгәй ҡыҙ: Эй, әбей, бик барыр инем дә, минең аяғыма кейеп барырға ситегем юҡ.

(Әбей йүгертеп кенә ситек килтереп бирә).

Әбей: Әйҙә, ҡыҙым, беҙгә,
Беҙҙекеләр байҙар,
Ашайҙар ҙа эсәләр,
Уйнайҙар ҙа көләләр.

Үгәй ҡыҙ: Эй, әбей, мин һеҙгә барыр инем дә, барғас ябынып ятырға юрғаным юҡ бит.

(Әбей йүгертеп кенә юрған килтереп бирә).

Әбей: Бына, ҡыҙым, юрған.

Әйҙә, ҡыҙым, беҙгә,
Беҙҙекеләр байҙар,
Ашайҙар ҙа эсәләр,
Уйнайҙар ҙа көләләр.

Үгәй ҡыҙ: Эй, әбей, бик барыр инем дә бит, барғас ябынып ятырға юрғаным булды, баш асҡтына һалып ятырға мендәрем юҡ бит.

(Әбей йүгертеп кенә мендәр килтереп бирә).

Әбей: Әйҙә, ҡыҙым, беҙгә,
Беҙҙекеләр байҙар,
Ашайҙар ҙа эсәләр,
Уйнайҙар ҙа көләләр.

Үгәй ҡыҙ: Эй, әбей, бик барыр инем дә бит, барғас кейергә алмаш күлдәгем, һөртөнөргә таҫтамалым да юҡ бит, нимә эшләрмен икән?

(Әбей тағын да йүгертеп ҡыҙ һораған әйберҙәрҙе килтереп бирә. Әйберҙәрен һалырға тип һандыҡта килтереп бирә).

Әбей: Бына, ҡыҙым, алмашҡа күлдәк, һөртөнөргә таҫтамал.

Әйҙә, ҡыҙым, беҙгә,
Беҙҙекеләр байҙар,
Ашайҙар ҙа эсәләр,
Уйнайҙар ҙа көләләр.

Етмәгән әйберең беҙгә барғас булыр, әйҙә ҡыҙым.

(Үгәй ҡыҙ уйланып, ҡайғыра башлай).

Үгәй ҡыҙ (уйланып): Нимә генә әйтәйем икән, бөтә әйберҙәрем дә булды бит.

(Шул ваҡыт таң әтәсе ҡысҡырып ебәрә.Әтәс тауышын ишетеүгә әбей юҡҡа сыға).

Дүртенсе бүлек

(Таң ата. Үгәй ҡыҙ матур итеп кейенгән, ҙур һандыҡ өҫтөндә йөн иләп ултыра. Үгәй әсәй мунсаға килә.)

Үгәй әсәй: Гөлсәсәк нимә эшләп ултыра икән? Инеп карайым әле.

(Үгәй әсәй аптырай) Кайҙан алдың был тиклем әйберҙәрҙе?).

Үгәй ҡыҙ: Минең яныма бер әбей килде,ҡунаҡҡа сақырҙы. Кейеп барырға күлдәгем юҡ тигәйнем, йүгертеп миңә ошо әйберҙәрҙе килтерҙе.

Үгәй әсәй: Бөгөн кискә үҙемдең ҡыҙымды ла мунсаға ебәрәйем. Ул да байыһын әле.

(Үгәй әсәй үҙенең ҡыҙын һуҡыр шәм яндырып мунсаға илтә. Ҡыҙ бер аҙ ултырғас теге әбей мунсаға килә)

Әбей: Әйҙә, ҡыҙым, беҙгә,
Беҙҙекеләр байҙар,
Ашайҙар ҙа эсәләр,
Уйнайҙар ҙа көләләр.

Алһыу: Эй, әбей, бик барыр инем,минең кейергә күлдәгем юҡ бит.

Әбей: Эй, йүнһеҙ ҡыҙ, ниңә мине алдайһың? Кейгән күлдәгең ниндәй яҡшы. Әле һиңә һаман етмәй меней, кисә минән ни тиклем әйбер ташыттың, бөгөн тағын шулай эшләмәксе булаһыңмы? Әйҙә, бөгөн мин һине үҙем менән алып китәм.

(Әбей ҡыҙҙы алып сығып китә.Үгәй әсәй ҡыҙын алырға мунсаға килә).

Үгәй әсәй: Эй, ҡыҙым янына барайым әле. Әйберҙәрен алып ҡайта алмай торғандыр. Ҡыҙым, ҡайҙа һин, әйберҙәреңде күрһәт әле. Ҡыҙым, Алһыу, ҡайҙа һин? Эй, аллам, үгәй ҡыҙҙан ҡотолам тип, үҙемдең ҡыҙымды юғалттым.

(Үгәй әсәй ҡыҙын эҙләп сығып китә. Гөлсәсәк инә.).

Үгәй ҡыҙ Гөлсәсәк: Юҡҡа ғына әйтмәйҙәр шул: «Кешегә соҡор ҡаҙыма, үҙең төшөрһөң» тип.

(Күмәк йыр башҡарыла: «Татыу ғаилә - ил терәге»).